12+

# Һаҡмар

№9 (2538), шишәмбе, 31 ғинуар, 2017 йыл

2000 йылдың ғинуарынан сыға

Баймаҡ районы һәм ҡалаһының ижтимаҕи-сәйәси гәзите
Гәзитте ойоштороусылар — Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Башҡортостан Республикаһының «Республика Башҡортостан» нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы

Гәзиттең сайты: www.hakmar.ru

Гәзит шишәмбе, йома көндәре сыға

**АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ**

## “Буранбай” техник потенциалын нығыта



Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары И.Р. Мөхәмәтдинов былтыр районда урып-йыйыу эштәре менән танышҡан ваҡытта Темәс ауылында “Буранбай” ҡулланыусылар кооперативының һөт ҡабул итеү пунктында булғайны. Ирек Радил улы производствоның эшмәкәрлеге менән танышҡандан һәм кооператив етәксеһе Фирҙәүес Абдулла ҡыҙы Алтынбаева менән осрашҡандан һуң, “Буранбай”ҙың эшенә юғары баһа бирҙе. Премьер-министр урынбаҫары ауылда производствоны үҫтереүҙең ыңғай яҡтарын билдәләп, уның эшмәкәрлеген артабан киңәйтеү тәҡдимен еткерҙе. Алтынбаевтар иһә 2015 йылда федераль бюджеттан бүленгән 2,8 млн һумлыҡ Грантты маҡсатлы файҙаланыу буйынса эш алып барылыуын билдәләне.

Ысынлап та, “Буранбай” кооперативы районда һөт йыйыу, уны ҡабул итеү өлкәһендә әүҙем эшләй. Бөгөн был предприятие ауыл биләмәләре, “А.Мырҙаҡаев”, “А.Юнысбаев”, “Ф.Ҡоланбаев”, “Л.Әхмәтов”, “А.Йәнтилин”, “И.Сәфәрғәлин”, “Н.Уразбаев”, “Б.Миңлебаев” КФХ-лары, “Рассвет” АХҠ-һы менән тығыҙ бәйләнештә эшләй, уларҙың иҡтисадын үҫтереүгә үҙенең тос өлөшөн индерә. Бөрйән районының “Урал” АХҠ-һы ла бөгөн продукцияһын тап “Буранбай”ға тапшыра. Шуныһы үҙенсәлекле, кооператив менән хеҙмәттәшлек итеүселәр һаны йылдан-йыл арта бара, сөнки ул һөт тапшырыусылар менән ваҡытында иҫәпләшә, миҙгелле кампаниялар осоронда алдан ярҙам күрһәтә. Дөйөм алғанда, әле 25 ауыл халҡы артып ҡалған продукцияһын “Буранбай”ға һата, уның 29 ағзаһы бар.

Былтыр дәүләттән бүленгән ярҙамға, йәғни 2 млн 800 мең һумға һәм үҙ саралары иҫәбенә кооператив өр-яңы техника һәм ҡоролмалар — һөт ташыу машинаһы, МТЗ-82.1 тракторы, пресс-йыйғыс, 5 танк-һыуытҡыс, “Ҡлевер” һөт анализлау ҡоролмаһы һатып ала. Сығымдарҙың 60 процентын — Грант, ҡалғанын үҙ аҡсаһы тәшкил итә.

“Буранбай” кооперативының Темәс, Буранбай, Йомаш ауылдарында һөт ҡабул итеү пункттары эшләй. Производство шарттарын яҡшыртыуға бында даими иғтибар бүленә. Былтыр Йомаштағы һөт ҡабул итеү пунктына ремонт үткәрелһә, быйыл иһә Темәстәгеһе тулыһынса реконструкцияланасаҡ.

Кооперативта үҙ эшенең алдынғылары тупланған. Темәс һөт ҡабул итеү пунктынан Фәриҙә Ишбулатова һәм Булат Яманғолов, Йомаштан Люция Әбүбәкирова һәм Әхәт Әбүбәкиров, Буранбайҙан Эльвира Хәмитова, һөт ташыу машиналары водителдәре Ғәбдинур Ҡунаҡкилдин һәм Флүр Яҫыбаевтар иңдәренә йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәй.

— Дәүләт ярҙамы беҙгә эшебеҙгә яңы ынтылыш бирә, ҙур яуаплылыҡ өҫтәй, — ти Алтынбаевтар, — кооперативты үҫтереүҙә һәр яҡлап ярҙам күрһәткәндәре өсөн район хакимиәте башлығы И.Х. Ситдыҡовҡа, ауыл хужалығы бүлегенә, “Баймаҡ” мәғлүмәт-консультация үҙәгенә рәхмәтлебеҙ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең менән әүҙем хеҙмәттәшлек иткән хужалыҡтарға, ауылдар халҡына ла рәхмәтебеҙ ҙур. Артабан да партнерлыҡ бәйләнештәре нығыһын, ауыл хужалығы үҫешһен, малсылыҡ тармағы яңы кимәлгә күтәрелһен.

**Азамат Мөхәмәтшин.**

**Һүрәттә: Фирҙәүес һәм Илдус Алтынбаевтар яңы машина һәм трактор янында.**

**АФАРИН!**

## “Шторм” да, “Осҡон” да еңеүсе!

6 ғинуарҙа Благовещен ҡалаһында XIX Башҡортостан Республикаһы уҡыусыларының спартакиадаһы иҫәбенә “Ҡыҙғылт һары туп” баскетбол лигаһы мәктәп чемпионатының финал уйындары тамамланды. Унда 2003-2004 йылғылар араһында үҙ төбәктәрендә еңеү яулаған иң көслө командалар көс һынашты.

Ҡыҙҙар командалары араһында финалға Баймаҡ ҡалаһының 4-се мәктәбенең “Шторм” һәм Бөрө ҡалаһының 1-се мәктәбенең “Орион” командалары сыҡты. Уйын һөҙөмтәһе буйынса 2016/2017 йылғы “Ҡыҙғылт һары туп” лигаһының алтын кубогын икенсе йыл рәттән “Шторм”дар яуланы! Улар “Орион”ды 52:40 иҫәбе менән еңде.

Шулай уҡ Баймаҡтың 4-се мәктәбенең “Осҡон” егеттәр командаһы беренсе тапҡыр чемпион исемен яуланы. Улар Өфө командаһын 62:60 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

“Шторм”, “Осҡон” командаларын һәм тренерҙар Ринат Мукаев, Евгения Путенихина, Вадим Маннапов, Азат Байрамғоловты лайыҡлы еңеүҙәре менән ҡотлайбыҙ, тағы ла юғарыраҡ үрҙәр яулауҙарын теләйбеҙ!

**Л. Такаева.**

## Уҙған аҙна хәл-ваҡиғалары

**01** Уҙған аҙнала ҡалала һәм районда 3 янғын сығыу осрағы теркәлгән. 26 ғинуарҙа Бикеш ауылында бер ир өйөндә ҡаралтыға бензин һибеп ут төртә. Сигнал булғас та янғын һүндереү часы һәм полиция хеҙмәткәрҙәре урынға сығып тикшереү уҙғара.

29 ғинуарҙа Түбәнге Яйыҡбайҙа усаҡлыҡ янып китә, һөҙөмтәлә, өй ҙә зыян күрә. Мейесте файҙаланыу ҡағиҙәһен теүәл үтәмәү шундай бәләгә килтерә лә инде. Ошо уҡ көндө Ҡуянтау ауылында ла янғын сыға. Был юлы электр сымдарының ҡыҫҡа тоташыуы һөҙөмтәһендә мунса янып китә.

**02** Эске эштәр бүлегенең дежур хеҙмәтенән алынған мәғлүмәттәр буйынса, уҙған аҙнала 100 хәл-ваҡиға теркәлгән. Шуларҙың 1-һе суицид, 2 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалырға маташҡан. Шулай уҡ урлыҡ, ваҡ хулиганлыҡ, ата-әсәлек бурыстарын үтәмәү осраҡтары ла бар. Эскән килеш йәмәғәт урындарында тәртип боҙған 46 кеше “эләккән”, 3 кеше тәмәке тартҡан. 6 кеше төрлө тән йәрәхәттәре менән мөрәжәғәт иткән. 66 кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған.

ЮХХДИ инспекторҙары тарафынан юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙған 160 кеше тотолған, 12 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, 11 кешенең иҫерек килеш руль артына ултырыуы асыҡланған.

**03** 227 кеше “Ашығыс ярҙам” хеҙмәтен саҡыртҡан. Ҡуянтау (4 тапҡыр), Мәмбәт, Әбделкәрим, Семеновск, Аҡморон һәм Мерәҫ ауылдарына ла барырға тура килгән. Ҡиҫкен респиратор вируслы инфекция менән 56 (шуларҙың 34-е бала) кеше ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. 17 бәхетһеҙ осраҡ теркәлгән, шуларҙың 4-һе бала. Алкоголь интоксикацияһы менән яфаланған 17 кешегә ярҙам күрһәтелгән.

**МАТБУҒАТ – 2017**

## Тағы бер һөйөнөс

**Хөрмәтле дуҫтар! “Һаҡмар” гәзитенә яҙылыу 13 ғинуарға тиклем оҙайтылғас, уҡыусыларыбыҙ өсөн өҫтәмә бүләк отторОу буласағы тураһында хәбәр иткәйнек. Ысынлап та ятраҡан гәзитенә яҙылып өлгөрмәгәндәр күп булып сыҡты һәм улар мөмкинлек менән файҙаланып “Һаҡмар”лы булды. Шулай итеп, Бикеш ауылынан С.Ф. Ибраһимова — кеҫә телефоны, Ишмырҙа ауылынан Ишмөхәмәт Мөрсәлимов “Һаҡмар” гәзитендә 1000 һумлыҡ бушлай ҡотлау отто. Еңеүселәребеҙҙе ихлас ҡотлап, бүләктәрен редакциянан килеп алыуҙарын һорайбыҙ.**

**“Һаҡмар” редакцияһы коллективы.**

**РӘСМИ БҮЛЕК**

## Район Советы ултырышы була

2 февралдә халыҡ ижады үҙәгендә 10.30 сәғәттә БР Баймаҡ районы муниципаль район Советының дүртенсе ултырышы үткәрелә. Көн тәртибендә:

1. Баймаҡ районы муниципаль район хакимиәтенең 2016 йылға отчеты тураһында район хакимиәте башлығы И.Х. Ситдыҡовтың доклады.

2. Баймаҡ районы муниципаль район Советының эше хаҡында район Советы рәйесе Д.Ю. Сәйғәфәрованың мәғлүмәте һәм башҡалар.

Ултырышҡа муниципаль район Советы депутаттары, район башлығы урынбаҫарҙары һәм хакимиәттең бүлек начальниктары, биләмә башлыҡтары һәм эштәр идарасылары, ҡаланың предприятие, ойошмалары етәкселәре, мәктәп директорҙары, ауыл мәҙәниәт йорто директорҙары, клуб мөдирҙәре, ветерандар советы рәйестәре, имам-хатиптар, хеҙмәт ярышында еңеүселәр, активистар саҡырыла.

## Диспансеризация — сәләмәтлек нигеҙе

«РГС-Медицина» ЯСЙ-һының Башҡортостан Республикаһындағы филиалы 2017 йылда 21, 24, 27, 30, 33, 36, 39, 42, 45, 48, 51, 54, 57, 60, 63, 66, 69, 72, 75, 78, 81, 84, 87, 90, 93, 96, 99 йәштәре тулған страховкаланған кешеләргә диспансерлаштырыу үткәрәсәге тураһында хәбәр итә.

Бөйөк Ватан һуғышы һәм һуғыш хәрәкәттәре инвалидтары, шулай уҡ дөйөм ауырыуҙар, эшләгән ваҡытта имгәнеү һәм башҡа сәбәптәр һөҙөмтәһендә инвалид булғандар, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, «Блокадалағы Ленинградта йәшәүсегә» билдәһе менән бүләкләнеүселәр, Икенсе бөтә донъя һуғышы ваҡытында фашистар һәм уларҙың союздаштары төҙөгән концлагерҙарҙың, геттоларҙың һәм башҡа мәжбүри тотоу урындарының элекке бәлиғ булмаған тотҡондары, нисә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, йыл һайын диспансерлаштырыу үтә.

Диспансерлаштырыу граждандарҙың сәләмәтлеге торошон ентекле тикшереүгә, шул иҫәптән бер нисә белгес тарафынан медицина тикшереүенә һәм тикшеренеүҙең кәрәкле ысулдарын ҡулланыуға йүнәлтелгән саралар комплексынан ғибәрәт.

Диспансерлаштырыуҙың төп маҡсаты — Рәсәй Федерацияһы халҡының инвалид һәм ваҡытынан алда вафат булыуының төп сәбәпсеһе булған сирҙәрҙе, шулай уҡ уларҙың барлыҡҡа килеүенең төп факторҙарын башланғыс осоронда асыҡлау.

Диспансерлаштырыу мәжбүри медицина страховкалау полисын һәм паспортты күрһәткәндән һуң страховкаланған кеше беренсел медицина-санитария ярҙамы алыр өсөн беркетелгән һаулыҡ һаҡлау ойошмаһында (поликлиникала) түләүһеҙ үткәрелә.

«РГС-Медицина» йәмғиәте белдереүенсә, 2017 йыл дауамында диспансерлаштырыу үткәреләсәк урын һәм көн тураһында мәғлүмәт страховкаланған кешеләргә страховкалаусы вәкилдәр тарафынан смс-хәбәр, телефон аша шылтыратыу, почта аша хат ебәреү һәм башҡа ысулдар менән уларҙың бәйләнешкә инеү өсөн ҡалдырған телефонын йә иһә адресын ҡулланып еткереләсәк. Мәғлүмәт ебәреү диспансерлаштырылырға тейешле кешеләр исемлеге медицина ойошмалары менән килешелгәндән һуң планға ярашлы сират буйынса үткәреләсәк.

Страховкаланған кешеләр диспансерлаштырыуға ҡағылышлы һорауҙар буйынса ентекле мәғлүмәтте «РГС-Медицина» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең Башҡортостандағы филиалы бәйләнеш үҙәге телефоны — 8-800-7758590 — буйынса ала ала. Шулай уҡ 453633, Башҡортостан Республикаһы, Баймаҡ ҡалаһы, Тыныслыҡ урамы, 1б адресына йәки 8 (34751) 2-28-26 телефоны аша мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Лиц. ЦБ РФ ОС № 3676-01 от 1 июня 2015 г. Серия 01 №002057. Реклама.

# Уҙған йылды барлайбыҙ,

**Йыл башында уҙған осорға йомғаҡ яһау, уңыштарҙы барлау, иң яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшкән хеҙмәткәрҙәрҙе, етәкселәрҙе билдәләү хәҙер инде матур йолаға әүерелде. Гәзитебеҙҙең был һаны уҙған йылдың иң сағыу ваҡиғаларына, уҙ эшенең оҫталарына арнала. 2016 йыл йомғаҡтары буйынса кемдәр "Йыл" номинацияларына лайыҡ булды? Иң-индәр муниципаль район хакимиәте, урындағы үҙидара органдары, төрлө хеҙмәттәр һәм ведомстволар менән берлектә билдәләнде.**

## Йыл ҡаҙанышы

Уҙған йылда Баймаҡ районы ауыл хужалығы производствоһын үҫтереүҙә ҙур һынылыш яһаны һәм үҫемлекселек, малсылыҡ өлкәһендә юғары ҡаҙаныштарға иреште. Район 150 мең тонна тулайым ашлыҡ йыйып алып, республика кимәлендә еңеп сыҡты һәм иген фабрикаһы булып танылды. Гектар ҡеүәте уртаса 20 центнер тәшкил итте. Районыбыҙ быйдай ҡаҙанышы өсөн Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Дипломына лайыҡ булды.

## Йыл еңеүе

Ҡырғыҙстанда үткән Бөтә донъя күсмә халыҡтары уйындарында Баймаҡ районы командаһы Башҡортостан намыҫын яҡлап сығыш яһаны һәм маҡтаулы дүртенсе урынды яулап ҡайтты. Был ҡаҙаныштары өсөн улар 350 мең һум премияға һәм БР Башлығының Рәхмәт хатына лайыҡ булды. Шулай итеп, баймаҡтар милли спорт төрө булған "Ылаҡ"ты тергеҙеп, тәжрибә үҙгәненә әйләнде, шулай уҡ яңы спорт төрө — ат биатлонына нигеҙ һалды.

## Йыл наградаһы

"Баймаҡ" мәғлүмәт-консультация үҙәге быйтыр Мәскәүҙә үткән "Алтын көҙ" Бөтә Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә "Башҡортостан Республикаһы агросәнәғәт комплексы өлкәһендә ауыл хужалығы тауары етештереүселәрен консультация менән тәьмин итеүҙә яҡшы ойошторғаны өсөн" номинацияһында Диплом һәм алтын миҙал менән бүләкләнде. Ә үҙәк директоры Р.В. Дәүербәковҡа эште юғары кимәлдә ойошторғаны өсөн Башҡортостан Республикаһы Ауыл хужалығы министрлығының Почет грамотаһы тапшырылды.

## Йыл хужалығы

Ленин исемендәге АХК уҙған йыл йомғаҡтары буйынса йәнә "Йыл хужалығы" булып танылды. Был исемде ул бер нисә йыл рәттән ҡулынан ысҡындырғаны юҡ. Район кимәлендә ойошторолған хеҙмәт ярыштарында был юлы ла лениндар беренселек лә алдынғылыҡты бирмәне. Был, әлбиттә, тәжрибәле һәм алдынғы ауыл хужалығы производствоһы етәксеһе Ғ.Б. Сәлимовтың, уның командаһының ныҡышмалы хеҙмәт емеше. Уҙған осорҙа хужалыҡта 55 млн һумлыҡ продукция етештерелгән, был уҙған йылға ҡарағанда байтаҡҡа күберәк. 25952 центнер продукция етештерелгән, был 15 процентҡа күберәк. Фуражҙағы һәр һыйырҙан 5190 кг һөт һауып алынған. 662 һыйырҙан 652 быҙау алынған. Бөтөн тармаҡтар буйынса ла үҫеш күҙәтелгән. Производствоның рентабеллеге — 12 процент.



## Йыл фермеры

Үткән йыл йомғаҡтары буйынса Г.З. Байрамғолова "Йыл фермеры" булып танылды. Гөлнара Зәйнулла ҡыҙы етәкләгән крәҫтиән-фермер хужалығын районда ғына түгел, ә бөтөн Урал арьяғы төбәгендә ҡошсолоҡ тармағы киң үҫешкән алдынғы предприятие булараҡ беләләр. Уҙған йылда хужалыҡ үҫемлекселек тармағында тәүге аҙымдарын яһаны һәм яҡшы һөҙөмтәгә ирешә. 510 гектарҙағы иген культураларынан мул уңыш үҫтереп алынды, гектар ҡеүәте 20,5 центнер тәшкил итте. Быйдай һөҙөмтә хужалыҡ эште яҡшы ойоштороу, ҡеүәтле матди-техник база, тейешле агротехник талаптарҙы теүәл үтәү арҡаһында өлгәште.

## Йыл һауынсыһы



Был номинацияла Ленин исемендәге АХК-ның алдынғы һауынсыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре Фәнүзә Байегетова еңеп сыҡты. Фәнүзә Әхмәт ҡыҙы — тәжрибәле, район хеҙмәт ярыштарында бер тапҡыр ҙа алдынғылыҡты бирмәгән, "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" исемен яулаған һауынсыларҙың береһе. Уҙған йылда ла һынатманы ул — үҙ төркөмөндәге һыйырҙарҙан 150 тонна һөт һауып алып, хужалыҡта ғына түгел, районда ла иң юғары һөҙөмтәгә ирешә. Фураждағы һәр һыйырҙан һауым уртаса 5100 кг тәшкил итте.

## Йыл предприятиеһы

"Водоканал" ЯСЙ-һы ҡарамағында 57,19 км һыу менән тәьмин итеү, 21,52 км канализация селтәре. Предприятиела 50 кеше эшләй. Быйтыр 799,37 мең куб әсәр һыу сығарылған. 14842 мең һум килем алынған. Быйтыр предприятиенең үҙ көсө менән 1,305 км һыу селтәре төҙөлгән. Иҫке һыу трассаһын алмаштырыу һыу юғалтыуҙы 20 процентҡа тиклем кәметергә булышлыҡ иткән. 2016 йылда үҙәкләштерелгән һыу селтәренә 66 абонент тоташҡан.

## Йыл механизаторы



"А.А. Шәрәфетдинов" КФХ-ны механизаторы Азат Сабитов өсөн үткән йыл уңышлы булды. Ул урып-йыйыу эштәре йомғаҡтары буйынса районда иң юғары һөҙөмтәгә ирешә һәм Социалистик Хеҙмәт Геройы Риза Яхин исемендәге махсус призға — күсмә кубокка һәм аҡсалата премияға лайыҡ булды. Бынан тыш, Азат Ҡаһарман улы "Ростсельмаш" компанияһының "Агросалон-2016" күргәҙмәһе йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы ун комбайнсыһы исемлегенә инде. Ә Өфөлә БР Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы йыйылышта А.Ҡ. Сабитовҡа "БР-ҙың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде.

## Йыл комбайнсыһы



Ленин исемендәге АХК-ның алдынғы механизаторы Зәки Ҡотлоғужин республика кимәлендә иғлан ителгән "Башҡортостандың иң яҡшы комбайнсыһы" конкурсында еңеү яулаһы һәм өр-яңы "Нива" автомобиле менән бүләкләнде. Зәки Булат улына юғары награданы Өфөлә БР Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантанала Башҡортостан Республикаһы Башлығы Р.З. Хәмитов тапшырҙы. Бынан тыш, З.Б. Ҡотлоғужин агросәнәғәт комплексы өлкәһендә оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләгәне өсөн Баймаҡ районы хакимиәтенең Почет грамотаһына лайыҡ булды.

## Йыл малсыһы



Ҡараталдан "А.Ш. Юнысбаев" КФХ-һында малсы булып эшләүсе Рәжәп Батыршин барлыҡ ғүмерен ауыл хужалығын үҫтереүгә арнаған. Быйа дүрт тиҫтә йылға яҡын инде ул Ҡаратал булексәһендә эшләй, фиҙаҡәр хеҙмәте менән башҡаларға өлгө күрһәтә. Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса Рәжәп Хәйрулла улы районда "Йыл малсыһы" булып танылды.

## Йыл йылҡысыһы



Темәс ауылынан "Б.А. Ҡотлоғалләмов" КФХ-һы районда йылҡысылыҡ, һыйыр малы үрсетеү менән маҡсатлы шөғөлләнгән, яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән хужалыҡтарҙан һанала. Бынан ун йыл элек йылҡысылыҡҡа тотонған был фермер хужалығында бөгөн 230 баш мал аҫрала, шуның 100-өн бейә тәшкил итә. Хужалыҡ башҡорт тоҡомло йылҡы һатыу, ит, төрлө деликатестар етештереү буйынса табышлы эшләй. Бынан тыш, КФХ-ла һыйыр малы үрсетеү менән маҡсатлы шөғөлләнәләр, әле улар һаны 40-ҡа еткән. Байрас Алмас улы киләсәктә һөтсөлөк тармағын үҫтерергә, быйыҡ өсөн малсылыҡ базаһы төҙөргә ниәтләй.

## Йыл етәксеһе



Ишмырҙа ауылынан крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе Р.Ғ. Рәсүлев үткән йыл йомғаҡтары буйынса "Йыл етәксеһе" номинацияһында еңеп сыҡты. Радик Ғәйнислам улы — районды төрлө хужалыҡтарында баш агроном булып байтаҡ тәжрибә туплаған, бөгөн инде фермер хужалығын уңышлы ойошторған етәкселәрҙең береһе. Уның эште яҡшы ойоштороуында быйтыр хужалыҡ йәйләүенә һөт үткәргес урынлаштырылды, КСД-2 тағылмалы комбайны һатып алынды, малсылыҡ базаһына капиталь ремонт үткәрелде. Малсылыҡта ныҡлы мал аҙығы базаһы тупланды. Бөгөн хужалыҡта 310 баш һыйыр малы аҫрала, производствола етди үҫеш күҙәтелә. Әле унда көндәлек уртаса һауым үткән йылға ҡарағанда ике тапҡырға күберәк. Коллектив ваҡытында эш хаҡы менән тәьмин ителә.

## Йыл ауыл хужалығы иҫәбен алыу

Уҙған йылда илдә Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу кампанияһы тамамланды. Район буйынса 15034 объект иҫәпкә алынған. Шуларҙың 1286-һы — ҡалала, 13428-е ауыл биләмәһендә, 239-ы — крәҫтиән-фермер хужалыҡтары һәм шәхси эшҡыуарҙар, 24-е — ауыл хужалығы ойошмалары һәм бәләкәй предприятиелар, 57-һе башҡа участкалары.

## Йыл инвестицияһы

Иҡтисадты үҫтереү маҡсатында районға инвестициялар йәлеп ителә, шуның менән эш урындары булдырыла. Әбйәлил районы эшҡыуарҙары Заһитовтар беҙҙең районда "Колибри" ЯСЙ-һының бер нисә филиалын асты. Бөгөн Ҡолсора, Йомаш, Таулыҡай ауылдарындағы теген цехтары уңышлы эшләй. Күптәр эш урындары менән тәьмин ителде. Ошо көндәрҙә Билал ауылында ла цех эш башлаясаҡ.

## Йыл йәмғиәте



Был номинацияла Йылайыр ауыл биләмәһенән "Юрта" йәмғиәте еңеп сыҡты. Ю.А. Найденов ойошторған был хужалыҡ быйа ике тиҫтә йылдан ашыу инде иген культуралары үҫтереү менән уңышлы шөғөлләнә. 800 гектарҙа ҡаты һәм йомшаҡ сортлы бойҙай үҫтереп, ул быйтыр айырыуса яҡшы уңыш үҫтереп алды, гектар ҡеүәте уртаса 22 центнер тәшкил итте. Уҙған миҙгелдә Юрий Анатольевич предприятиеның матди-техник базаһын яңы К-700 тракторы, дискатор менән нығытты.

## Йыл техник-осеменаторҙары



Күлтабан ауылындағы мегаферма техник-осеменатор булып эшләгән Вәкил Юнысбаев үткән йыл йомғаҡтары буйынса ошо номинацияла еңеп сыҡты. Вәкил Шәфҡәт улы — танылған белгес, ул оҙаҡ йылдар район хужалыҡтарында техник-осеменатор булып уңышлы эшләй. Республика ярыштарында ла бер нисә тапҡыр еңеп сыҡты. Әле ул Күлтабандағы һөт етештереү комплексында үҙ эшен яуаплы башҡара, тоҡомсолоҡто яҡшыртыуға тос өлөш индерә.



Ленин исемендәге АХК-ның Таулыҡай фермаһы техник-осеменаторы Гөлшат Исмәғилева районда танылыу яулаған, үҙ эшендә юғары күрһәткестәргә өлгәшкән белгестәрҙең береһе. Гөлшат Шәнәрғәзе ҡыҙы быйтыр 370 һыйырҙан 352 быҙау алып, яҡшы һөҙөмтәгә ирешә. Был үткән йылға ҡарағанда 36 быҙауға күберәк.

## Йыл бригадиры



Татлыбайҙан "Р.И. Ишмуллин" КФХ-һының малсылыҡ комплексы бригадиры Батыр Мөхәмәтшин үҙ участкаһындағы эштәрҙе яҡшы ойоштороуға өлгәшә. Батыр Салауат улының тырышлығы менән үткән йылда малсылыҡ продукцияһы етештереү, яңы миҙгелгә әҙерләнеү буйынса байтаҡ эш башҡарылды. Уҙған осор йомғаҡтары буйынса ул "Йыл бригадиры" булып танылды.

## Йыл быҙау ҡараусыһы



"Рассвет" АХК-һында быҙау ҡараусы булып эшләгән Рәйсә Орлова йыл номинацияһында еңеү яулаһы. Рәйсә Энгельс ҡыҙы хужалыҡта оҙаҡ йылдар эшләй, намыҫлы хеҙмәте менән абруй ҡаҙанған. Быйтыр ул үҙ төркөмөндәге быҙауҙарҙан 740 г артым алыуҙы тәьмин итте.

## Йыл ветврачы



Ирәндек ветеринар дауалауханаһы мөдире Венер Мәҡсутов "Йыл ветврачы" булып танылды. Венер Вәхит улы — һәләтле белгес, ул Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын, Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған. Хеҙмәт юлын 2009 йылда Ирәндек ветеринар дауалауханаһында ветсанитар булып башлай, артабан врач-эпизоотолог булып эшләй. Бынан өс йыл элек уға дауалауханаһы етәкләү ышанып тапшырыла. В.Мәҡсутовтың эште оҫта ойоштороуында быйтыр ветеринария хеҙмәте үҙ иненә йөкмәтелгән эште уңышлы атҡарып сыҡты.

# иң-иңдәрҙе данлайбыҙ!

## Йыл сәйәси ваҡиғаһы

Уҙған йылда Етенсе саҡырылыш РФ Дәүләт Йыйылышы Дәүләт Думаһына депутаттар һайлауы уҙҙы. Республика буйынса бөтәһе 72,23 процент халыҡ граждандлыҡ бурыссын үтәне. Һайлаусыларҙың 58,73 проценты "Берҙәм Рәсәй" партияһына ышаныс күрһәтте. Алты округта депутат мандаты өсөн 47 кандидат көрәште. Шуларҙың бишәүһендә һайлаусылар "Берҙәм Рәсәй" вәкилдәренә өҫтөнлөк бирҙе. Баймаҡ ҡалаһы һәм районы ҡараған Салауат һайлау округы буйынса Зариф Байғусҡаров 114753 (57,41 процент) депутат итеп һайланды.

## Йыл акцияһы

Йыл дауамында "Һаҡмар"ға яҙыл һәм бүләк от!" акцияһы барҙы. Акцияға ололар ҙа, йәштәр ҙә ихлас ҡушылды. Уның барышында ауылдар халҡы менән осраштыҡ, фәһемле һәм файҙалы һөйләшеүҙәр ойошторҙоҡ. Шунда уҡ "Һаҡмар" гәзитенә яҙылыусылар араһында бүләктәр ҙә уйнатылды. Һөҙөмтәлә, 2017 йылға 3300-ҙән ашыу тираж йыйып алдыҡ.



## Йыл ауыл биләмәһе башлығы

Илгиз Гәлимнур улы Йәнбирҙин Ярат ауылы биләмәһен 2015 йылдан етәкләй. Ошо ваҡыт эсендә ул ауылдарҙа байтаҡ эштәрҙе атҡарып сығыуға өлгәште. Ярат, Ғүмәр һәм Мырҙаҡай ауылдарының зыяраттары тулыһынса кәртәләп алынған. Ғүмәр, Ярат ауылдары урамдарына ҡырсынташ түшәлгән. "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы ойошторолған. Берҙәм Рәсәй партияһының "Аныҡ эштәр" проекты ярашлы Ярат ауылында тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы асылды. Бындағы барлыҡ эштәрҙе атҡарып сығыуға ауылдар халҡы ҙур көс һалған.



## Йыл ҡымыҙсыһы

Былтыр районда XI республика ҡымыҙсылар бәйгеһе уҙҙы. Унда 28 районда ҡымыҙ бешеү оҫталары һәм йылҡы көтөүселәре көс һынашты. Йомаш ауылынан бер нисә йыл рәттән бындай сараларҙа ҡатнашып, бай тәжрибә туплаған ҡымыҙ бешеү оҫтаһы Зифа Иҫәнова 2-се урынды яуланы. Ул конкурстың баһалама ағзаларына ҡымыҙҙың күп төрөн тәҡдим итте.



## Йыл ғаиләһе

50 йыл бергә һоҡланғыс, матур ғүмер иткән, береһенән-береһе уңған балалар үҫтергән Сәкинә Мортаза ҡыҙы һәм Минникамил Замил улы Иҫәнголовтарға уҙған йылда "Мөхәббәт һәм тоғролоҡ өсөн" миҙалы тапшырылды. Уларҙың икеһе лә һоҡланғыс ғүмер юлы үткән. Фиҙаҡәр хеҙмәттәре менән район һәм илебеҙҙең киләсәгенә тос өлөш индергәндәр.



## Йыл эшсеһе

Әҙеһәм Әкрәм улы Арсланов 33 йыл "Баймаҡ ҡойоу-механика заводы" ААЙ-һында эшләй. Хеҙмәт баҫҡысын һөнәрсе булараҡ башлаһа, бөгөн ул 6-сы разрядлы токарь. Заводта ҡоростан етештерелгән тауарҙы механик эшкәртеү уға ышанып тапшырылған. Фиҙаҡәр хеҙмәте, тырышлығы өсөн ул БР Хөкүмәтенең Почет грамотаһына лайыҡ булған. Хеҙмәт ветераны исемен дә лайыҡлы йөрөтә. Бай тәжрибәле оҫта йәштәрҙең остаҙы ла.



## Йыл спортсыһы

Дамир Әнүәр улы Зиннәтуллин 2012 йылдан Баймаҡ балалар һәм үҫмерҙәр клубында бокс буйынса уҡытыусы-тренер булып эшләй. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул ҙур ғына уңыштарға өлгәшкән. Күп кенә тәрбиәләнеүселәре район, республика, Рәсәй кимәлендә ойошторолған ярыштарҙа призлы урындар яулаған. Мәҫәлән, бокс буйынса республика, Рәсәй киңлегендә уҙған төрлө ярыштар призеры Элина Билалова уның тәрбиәләнеүсеһе.



## Йыл дознавателе

Өфөлә уҙған "Батырлыҡ йондоҙо" тип аталған Бөтә Рәсәй фестивале РФ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы системаһында янғын хәүефһеҙлеген һаҡлау йылына бағышланып, ошо өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшеүселәр бүләкләнде. "Батырлыҡ йондоҙо" геройҙары араһында Баймаҡ янғын хәүефһеҙлеген күҙәтеү һәм профилактикалау бүлегенең өлкән дознавателе Илдар Хәлит улы Хәмитов та бар ине. Ул "Иң яҡшы янғын хәүефһеҙлеген күҙәтеү дознавателе" булып танылды.

## Йыл ауыл биләмәһе

Мерәҫ ауылы уҙған йылда 200 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Был олпат датаны ауыл халҡы лайыҡлы ҡаршыланы. Мерәҫ һәм Бәхтигәрәй ауылдарында төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бирелде. "Мерәҫ ауылы тарихы" китабы донъя күрҙе. Баренцево диңгеҙендә "Курск" һыу аҫты кәмәһендә фажиғәле һәләк булған мичман Фәнис Ишморатовтың яҡты иҫтәлегенә стела асылды. Республика кимәлендә иғлан ителгән "Алтын бишек" телевизион конкурсында мерәҫтәр лайыҡлы рәүештә 3-сө урынды яуланы.



## Йыл эшҡыуары

Әнисә Мөхәммәтфәле ҡыҙы Байрамғолова районда уңышлы эшләп килгән эшҡыуарҙарҙың береһе. Ул 2009 йылда "Фантазия" тегеү ательеһын аса. Бөгөн ул бай тәжрибә туплаған оҫта тегенсе. Ябай күлдәктән алып тирәнән тун, жилеттарға тиклем тегә. Фольклор һәм бейеү ансамблдәре менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Әнисә Байрамғолова кафелар менән дә хеҙмәттәшлек итә. Уларҙың һорауҙары буйынса ашъяулыҡ, салфетка, түл, ҡорғандар тегә.



## Йыл водителе

Салауат Исхаҡ улы Үлйәбаев Баймаҡ АТП-һында 2011 йылдан эшләй. Бөгөн ул тәжрибә туплаған оҫта водителдәрҙең береһе. Тырыш, үҙ бурысына ҙур яуаплылыҡ менән ҡараған водителгә алыҫ һәм яуаплы рейстарға йөләп итәләр. Ул үҙенә ышанып тапшырылған автобусты һәр саҡ төҙөк һәм таҙа тоторға тырыша. Пассажирҙар менән дә һәр ваҡыт яҡшы мөнәсәбәттә. Уларҙың һаулығы һәм ғүмере өсөн ҙур яуаплылыҡ тотҡанын яҡшы аңлап эш итә. С.Үлйәбаев тырыш хеҙмәте менән коллективында абруй яулаған.



## Йыл уҡытыусыһы

Былтыр "Йыл уҡытыусыһы" район конкурсында 3-сө мәктәптән башланғыс кластар уҡытыусыһы Луиза Мукаева Гран-при яуланы. Луиза Ирек ҡыҙы бар ғүмерен 3-сө мәктәп менән бәйләгән – ошо мәктәптә үҙе белем алған, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлағас, тыуған мәктәбенә эшкә ҡайта һәм 25 йыл башланғыс кластарҙа уҡытып, юғары баҫҡысҡа оҙата. "Конкурста ҡатнашыуым – сирек быуатлыҡ педагогик эшемдең һөҙөмтәһе, тип уйлайым. Ошо йылдарҙа туплаған тәжрибәм уңышҡа ирешергә ныҡ ярҙам итте", – ти ул еңеүе тураһында.



## Йыл тәрбиәсеһе

Миңлегөл Мерәҫова 31 йыл ғүмерен балаларға музыкаль тәрбиә биреүгә, уларҙың һәләттәрен үҫтереүгә арнаған юғары категориялы педагог. Ул "Толпар" балалар баҡсаһында музыка етәксеһе булып эшләй. Тәрбиәләнеүселәре – Азамат Ғөбәйҙуллин 2011 йылда "Сулпылар" телеконкурсында Гран-при яулаһа, Әлфинә Абдуллина шул йылда өсөнсө урынға лайыҡ булды. Ә былтыр Айгүзәл Зәйнуллина ошо уҡ конкурста өсөнсө урынды яуланы. Миңлегөл Миңнулла ҡыҙының тырыш хеҙмәте республика һәм Рәсәй кимәлендәге грамоталар менән баһаланған.

## Йыл китапханаһы

"Йыл китапханаһы-2016" исеменә Баймаҡ районының балалар моделле китапханаһы дәғүә итә. Былтыр был китапхана "Иң яҡшы башҡорт китабы" XI республика конкурсының "Балалар прозаһы оҫталары" номинацияһында өсөнсө урынды яуланы.



## Йыл врачы

Хирургия бүлеге мөдире Юлиан Абдуллин ҡаланың 2-се мәктәбен тамамлағас, Өфө дәүләт медицина университетының дауалау факультетына уҡырға инә. Белем алған осорҙа уҡ республика клиник дауаханаһының нейрохирургия реанимацияһында сирҡаныс ала. Уҡыу йортонан һуң Баймаҡ район дауаханаһында бер йыл интернатура үтеп, "хирург" специальносына эйә була. Артабан төрлө йылдарҙа поликлиникала, балалар консультацияһында, хирургия бүлегендә эшләй. Юлиан Валерьевич 2016 йылдан алып хирургия бүлеген етәкләй.



## Йыл шәфҡәт туташы

Ике йыл элек асылған паллиатив бүлектең юғары категориялы шәфҡәт туташы Гөлназ Ҡасҡынова "Йыл шәфҡәт туташы" исеменә лайыҡ булды. Ғәҙелбай ҡыҙы, Беренсе Этҡол урта мәктәбен тамамлағас, Сибай медицина училищеһына юллана. Уҡыу йортон уңышлы уҡып бөтөп, ул Баймаҡ үҙәк дауаханаһының неврология бүлегендә 26 йыл шәфҡәт туташы булып эшләй. Гөлназ Әхмәр ҡыҙы дауахананың йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашырға ваҡыт таба.



## Йыл китапханасыһы

Һаҡмар ауылы китапханасыһы Гәлиә Мәһәҙиева республикала иң яҡшы китапханасылар исемлегенә инеп, аҡсалата грант менән бүләкләнде. Ул был китапханала сирек быуат хеҙмәт көсө түгә, бынан тыш ауылдың йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Гәлиә Ҡотлобай ҡыҙы ауылдың ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзаһы, ауыл биләмәһенең һайлау участкаһы комиссияһы рәйесе, "Атайсал", "Ағинәйҙәр", "Әхирәттәр" клубтары етәксеһе. Грант аҡсаһына тынғыһыҙ китапханасы өҫтәлдәр, ултырғыстар, баннерҙарға заказ бирҙе.

## Йыл эстафетаһы

Былтыр Рәсәй киноһы йылы уңайынан районда "Алтын ҡомартҡы" эстафетаһы гөрләп үтте. Уның нигеҙе итеп яҡташыбыҙ, ҡурайсы, фольклорсы, РФ-ның һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР-ҙың С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың халыҡ артисы Юлай Ғәйнетдиновтың "Хазина" тапшырыуҙарының геройҙары булған яҡташтарыбыҙ тураһындағы фильмдар алынды, шулай уҡ урындағы ҡомартҡыға тиң халыҡ таланттары күрһәтелде. Эстафета 39 ауыл биләмәһендә үтте.



## Йыл йырсыһы

Йыл аҙағында йырсыларҙың иң яҡшыларын баһалау маҡсатында үткәрелгән "Башҡорт йыры" республика телевизион фестивалендә Буранбай ауылы һылыуы – З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты студенты, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы вокалисы Нәргизә Аралбаева беренсе дәрәжәле дипломға эйә булды.



## Йыл бейеүселәре

"Байыҡ-2016" республика телефестивалендә БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, халыҡ ижады үҙәгенең "Ләйсән" халыҡ бейеүҙәре ансамбле балетмейстеры Динислам Исҡужин Гран-при яуланы. Шулай уҡ Темәс ауылынан "Саптар" хореографик студияһының тәрбиәләнеүсеһе Байрас Харисов балалар "Байыҡ-2016" конкурсында Гран-приға эйә булды.



## Йыл таҡмаҡсылары

Темәс ауылында үткән республика таҡмаҡсылар бәйгеһе районыбыҙҙың таҡмаҡсыларға бай төбәк икәнен күрһәтте. Унда балалар араһынан Әнгизә Нурғәлина (Темәс) беренсе урынды яуланы. Ҡумаҡ башҡарыусыларҙан Темәстән "Ғилмияза" һәм Урғаҙанан "Ялан" фольклор ансамблдәре беренсегә сыҡты.

# Котлайбыҙ!

217. Милләтебеҙҙең абруйлы ҡыҙы, өлгөлө ҡатын-ҡыҙ, хөрмәтле коллегабыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Дәүләтшина Луиза Ҡаһарман ҡыҙын** ғүмеренең матур байрамы — күркәм юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Районыбыҙ мәҙәниәтен, халҡыбыҙҙың рухи-мәҙәни мираҫын, йолаларын, Баймаҡ район китапхана эшен үҫтереүҙә Луиза Ҡаһарман ҡыҙының өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Яҡташтарының оло һөйөүен ҡаҙанып ҡына ҡалмайынса, республика кимәлендә лә лайыҡлы абруй яулаған йәмәғәт эшмәкәре, тәжрибәле ойоштороусы, башҡорт әҙәбиәтен үҙенең Ватанынын һөйгән кеүек үк яратыусы, ҡәҙерләүсе шәхес, баймаҡтарҙың ғорурлығы ла ул. Барлыҡ ғүмерегеҙҙе, көсөгөҙҙө кешеләр бәхете өсөн биргән гүзәл зат булараҡ, эскерһеҙлегегеҙ, ихласлығығыҙ, яғымлығығыҙ менән кешеләр күңелен яулаңығыҙ. Киләсәктә лә тирә-йүндәгеләрҙе ошо күркәм сифаттарығыҙ менән һөйөндөрөп ғүмер итегеҙ, әлегеләй дәрт-дарманлы, көслө ихтыярлы, һынмаҫ рухлы, илһөйәр булып ҡалығыҙ. Һеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер, ғаилә бәхете, изге ғәмәлдәрегеҙҙең үҙегеҙгә меңләтә әйләнеп ҡайтыуын теләйбеҙ. Алдағы тормошоғоҙҙа уңыштар, бәхет-ҡыуаныстар ғына юлдаш булһын. Тормош иптәшегеҙгә, балаларығыҙға, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙгә терәк-таяныс булып, һөйөнөп, тормошоғоҙҙан йәм табып йәшәргә яҙһын.



**Баймаҡ үҙәк китапханаһы коллективы.**

220. Хөрмәтле **Дәүләтшина Луиза Ҡаһарман ҡыҙын** күркәм юбилейы уңайынан ихлас күңелдән ҡотлап, бәхетенең ғүмерлек, ғүмеренең бәхетле булыуын теләйбеҙ. Өлөшөгөҙгә төшкән бөтә шатлыҡтарҙы күрер өсөн ғүмерегеҙ оҙон, һаулығығыҙ ныҡлы булһын, киләсәк көндәрегеҙ өмөт менән тулы булып, ғүмер йомғағығыҙ тик шатлыҡ-һөйөнөстәргә тулып тәгәрәһен. Һәр ваҡыт шулай ихлас булып ҡалығыҙ, алсаҡ йөҙөгөҙҙә гел нур балҡыһын, һеҙҙе яратҡан ғаиләгеҙ, туғандарығыҙ араһында шатланып-ҡыуанып ғүмер итегеҙ.

Ҡара ҡашығыҙҙың ҡанаттарын
Ҡарлуғастар бүләк иттеме.
Йөҙөгөҙ нурлы, әллә бит осонан
Таң ҡояшы үбеп киттеме.
Теләгебеҙ — ошо гүзәллекте
Юғалтмайса ғүмер буйына.
Бәхет гөлләмәһен наҙға сорнап,
Ҡыйыу атлағыҙ тормош юлынан.

**Район ҡатын-ҡыҙҙары президиумы.**

195. Икенсе Этҡол ауылынан ҡәҙерле атайыбыҙ **Сырлыбаев Барый Сәйфулла улын** 80 йәшлек оло юбилейы уңайынан ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ. Ҡәҙерлебеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер, бәхетле ҡартлыҡ теләйбеҙ. Балаларыңа терәк-таяныс булып, шатлыҡ-ҡыуаныстарға төрөнөп, яҡындарыңдың күңел йылыһын тойоп, именлектә йәшәргә насип булһын.

Рәхмәт, атай, мең-мең рәхмәт,
Бар нәмәгә булдың түҙемле.
Сәләмәт бул, ҡайғылар һис күрмә,
Хоҙай ололаһын үҙеңде.
Ҡыуаныстар шишмә булып аҡһын,
Күтәренке булһын күңелең.
Именлектә, беҙҙең менән бергә
Үтһен гөрләп һинең ғүмерең.

**Улы Риф, килене Нәғимә, ҡыҙҙары Әлфирә, Әлифә, Миңзәлә, кейәүҙәре Азамат, Фәрит, Миндияр, ейән-ейәнсәрҙәре.**

209. Бетерә ауылынан ҡәҙерле атайыбыҙ, ҡайныбыҙ, олатайыбыҙ **Сәфәрғәлин Миңлеғәле Тимербулат улын** 75 йәшлек юбилейы уңайынан ҡайнар ҡотлайбыҙ. Һаулыҡтың ныҡлыһын, ғүмерҙең оҙонон, балаларының изгелеген күреп, ейән-ейәнсәрҙәренә һөйөнөп йәшәүен, бәхетле ҡартлыҡ теләйбеҙ. Рәхмәт, атай, барыһы өсөн дә. Һәр имен атҡан таңға һөйөнөп, беҙгә, балаларыңа, терәк-таяныс булып, әсәйебеҙ Ҡлара Салих ҡыҙы менән барыбыҙҙың да күңел йылыһын тойоп, изгелектәр күреп, ҡәҙер-хөрмәттә, тиңлектә-тигеҙлектә оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын.

Ерҙә һин булғанға беҙ бәхетле,
Барыбыҙға ныҡлы терәк һин.
Хоҙай һиңә ныҡлы һаулыҡ бирһен,
Һин бит беҙгә шундай кәрәкһең.
Йән рәхәте бирһен Хоҙай һиңә,
Тән сихәте бирһен ғүмергә.
Насип итһен оҙаҡ йылдар шулай,
Именлектә бергә йәшәргә.

**Ҡатыны, ҡыҙҙары, улдары, кейәүҙәре, ейән-ейәнсәрҙәре, һеңлеһе.**

117. Ишмырҙа ауылынан ҡәҙерле әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ, **Нурия Ғәйнетдин ҡыҙы** һәм атайыбыҙ, ҡайныбыҙ, ҡартатайыбыҙ **Миңдәүләт Хөрмәт улы Тләүсиндарҙы** 60 йәшлек юбилейҙары уңайынан ҡайнар ҡотлайбыҙ.



Ҡәҙерлеләребеҙгә тулы бәхетле ғүмер, ныҡлы һаулыҡ теләйбеҙ. Һәр атҡан таңға ҡыуанып, именлектә-һаулыҡта йәшәргә яҙһын. Һеҙ беҙҙең тормошобоҙҙоң ҡототерәге, мәңге һүнмәҫ йондоҙо һәм йәме. Бөтәһе өсөн дә һеҙгә рәхмәтлебеҙ.

**Балаларығыҙ, киленегеҙ, кейәүегеҙ, ейән-ейәнсәрегеҙ.**

193. Беренсе Төркмән ауылынан ҡәҙерлебеҙ — тормош юлдашым, әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **Ильясова Мөслимә Нуриәхмәт ҡыҙын** оло байрамы — 55 йәшлек юбилейы менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ. Һиңә ныҡлы сәләмәтлек, күңел тыныслығы, ғаилә шатлығы, ҡайғы-хәсрәтһеҙ көндәр, аҡ бәхеттәр, балаларыңдың һәм ейәндәреңдең күңел йылыһын тойоп, изгелектәрен күреп, бәхетле оҙон ғүмер кисереүеңде теләйбеҙ. Һин булмаһаң беҙ ояһыҙ ҡош, моңһоҙ йыр, йырһыҙ һандуғас кеүек йәшәр инек, тормошобоҙҙоң йәме лә, тәме лә булмаҫ ине. Алламдың мең рәхмәте яуһын үҙеңә. Тыуасаҡ таңдарың һәр ваҡыт нурлы, күк йөҙөң аяҙ булһын, гел шулай йылмайып, кешеләрҙе һөйөндөрөп йәшә.



Ҡояш йылыһына йыйылғандай,
Һыйынабыҙ һинең янына.
Тормош йәмен, матурлығын тойоп,
Йәшә, әсәй, йәшә тағы ла.
Ҡайтҡан һайын һинең яндарыңа,
Ҡолас йәйеп ҡаршы алаһың.
Мең-мең рәхмәт, әсәй, тәрбиәңә,
Беҙҙең өсөн мәңге кәрәк һин.

**Тормош иптәшең Мирза, улың Руслан, ҡыҙҙарың Рәзилә, Тәслимә, кейәүең Рафиҡ, киленең Роза, ейәнсәрҙәрең Розалина, Гөлъемеш, ейәндәрең Рамаҙан, Радмир.**



224. Муллаҡай ауылынан тормош юлдашым, әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **Әхмәтҡужина Гүзәл Солтангәрәй ҡыҙын** 55 йәшлек күркәм юбилейы уңайынан ихлас ҡотлайбыҙ. Ныҡлы һаулыҡ, шатлыҡ-ҡыуаныстар, ғаилә именлеге, балалар изгелеге, донъя рәхәтлектәре күреп, ҡәҙер-хөрмәттә оҙаҡ йәшәүен теләйбеҙ.

**Тормош иптәше Таһир, ҡыҙҙары Нурия, Заһира, кейәүе Радик, улдары Раян, Рәмис, ейән-ейәнсәрҙәре Элина, Эльдар.**

226. Мерәҫ ауылынан ҡәҙерле тормош иптәшем, атайыбыҙ **Ямантаев Өлфәт Рәфҡәт улын** матур юбилейы уңайынан ихлас ҡотлайбыҙ. Сәләмәтлектең ныҡлыһын, ғүмерҙең иң оҙонон, бәхеттәрҙең мөлдөрәмә тулыһын теләйбеҙ. Күңелең һәр ваҡыт тыныс, донъяң түңәрәк, тормошоң бәрәкәтле, эштәрең уң булһын. Ғүмереңдең һәр миҙгеленә ҡыуанып, барыбыҙҙың да яратыуын тойоп, ғаиләбеҙҙең ҡото булып, донъябыҙға йәм өҫтәп, барыбыҙҙы ла ҡыуандырып, именлектә бергә-бергә оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын.

Оҙон ғүмер бирһен һиңә Хоҙай,
Беҙҙең өсөн оло терәк һин.
Беҙҙән һиңә мең-мең рәхмәт,
Беҙҙең өсөн һәр саҡ кәрәк һин.

**Тормош юлдашың Ләйсән, улдарың Алтынсура, Айгиз, Асҡар.**

211. Әмин ауылынан хөрмәтле һәм ҡәҙерле **Ишҡыуатов Әхәт Мөхәмәт улын** күркәм юбилейы уңайынан ҡайнар ҡотлайбыҙ. Киң күңелең, кешелеклегең, яҡты йөҙөң, алтын ҡулдарың өсөн сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Изге һәм бәрәкәтле нигеҙеңдә һаулыҡта, муллыҡта, тыныслыҡта иң яҡын кешеләрең, туғандарың менән бөтәбеҙҙе лә берләштереп, оҙон-оҙаҡ йәшәргә яҙһын.

Һин булғанға беҙҙең тормош матур,
Һин бит беҙгә оло бер терәк.
Йондоҙҙарға ай нисек кәрәк,
Һин дә беҙгә шулай бик кәрәк.
Юбилейың һинең ҡотло булһын,
Көндәреңде шатлыҡ биҙәһен.
Сәләмәтлек — үҙе бәхет бит ул,
Хоҙай шунан мәхрүм итмәһен.

**Туғандарың, яҡындарың.**

213. Ишбирҙе ауылынан әсәйебеҙ, ҡәйнәбеҙ, өләсәйебеҙ **Вәлиева Хибизә Әптелфәйез ҡыҙын** 55 йәшлек матур юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ҡәҙерлебеҙ, киләсәктә лә һәр атҡан таңға ҡыуанып, үҙеңдең барлығың менән беҙҙе һөйөндөрөп, именлектә-һаулыҡта тағы ла оҙаҡ йылдар бергә-бергә йәшәргә яҙһын. Хоҙай һине сәләмәтлектән, балалар һөйөүенән, донъя бәрәкәтенән айырмаһын. Беҙ һине яратабыҙ һәм тик һин барҙа ғына бәхетлебеҙ. Һиңә алдағы көндәреңдә бәхетле ҡартлыҡ, күңел тыныслығы, балалар рәхмәте, туғандар фатихаһы насип булһын, беҙҙе бәхетле — әсәйле итеп йәшә лә йәшә.

Беҙҙең өсөн мәңге ҡәҙерле һин,
Хоҙай ҡушһын оҙаҡ йәшәргә.
Ғүмер буйы яҙһын ине беҙгә,
Әсәй, тиеп әйтеп йәшәргә.

**Ҡыҙҙарың, кейәүҙәрең, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

177. Юлыҡ ауылында тыуып үҫеп, хәҙерге ваҡытта Сибай ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерле ҡыҙыбыҙ **Ҡотлоғужина-Сәйетова Илзирә Салауат ҡыҙын** 30 йәшлек матур юбилейы уңайынан ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Ҡәҙерлебеҙгә алдағы ғүмер юлында тик аҡ бәхеттәр, шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына теләйбеҙ. Гел шулай күңелең нуры менән донъябыҙҙы балҡытып, тормошобоҙға йәм өҫтәп йәшә, көләс йөҙлө, алсаҡ, ихлас булып ҡал, барыбыҙҙың да ихтирамын тойоп, уңыштарға өлгәшеп, именлектә ғүмер ит, барлыҡ изге уй-теләктәрең бойомға ашһын. Беҙ һине яратабыҙ!



Һөйөү-наҙың беҙгә аҡ нур һибә,
Ҡарашыңдан аҡыл бөркөлә.
Беҙҙең өсөн юҡ ул ер йөҙөндә
Һинән ҡәҙерлерәк бер кем дә.

**Атайың Салауат, әсәйең Хөриә, ҡустың Самат, һеңлеләрең Гөлшат, Айгөл, тормош иптәшең Руслан, улдарың Алмаз, Айгиз.**

НАТЯЖНЫЕ ПОТОЛКИ
1+1=3-й потолок бесплатно.
Короткие сроки, гарантия.
Подробности по т. 8 963 900 52 46.
ИП Сагинбаев И.З. ИНН 025405265078. Реклама.

Такси «Ислам» Өйҙән — урынға тиклем
Баймаҡ-Өфө-Баймаҡ
8 964 958 72 02, 8 927 311 24 24
Посылкалар, юл документтары.
Реклама. ШЭ Галина Г.И. ИНН 025405989994. Эшм. лиц.

СПУТНИКОВЫЕ АНТЕННЫ
Триколор 1, 2, БСТ, Курай
Телекарта установка, обмен
8 927 954 24 22
ООО "БашТехноРесурс" ИНН 0267010602. Реклама.

СПУТНИКОВЫЕ АНТЕННЫ
от официального дилера по низким ценам
ТРИКОЛОР, ТЕЛЕКАРТА
1, 2, БСТ, Курай, более 80 каналов
Бесплатная доставка. Установка. Гарантия.
8 927 340 86 37
ИП Рахметов Ф.Р. Реклама.

## ҺАТАМ

Рек. хоҡ.

120. Ҡәбәк, бойҙай, һоло, ҡатнаш аҙыҡ, ярма, арпа, арыш, ПҠ. Т. 8 927 309 41 71.

6. Шлакоблок, газоблок, мейес һәм йөҙләү кирбесе, цемент, шифер. Алып барабыҙ, һаҡлау. Т. 8 963 141 97 50, 8 937 164 05 50.

21. Һанлап ит. Т. 8 917 488 77 29.

**216. 1 бүлмәле фатир. Т. 8 903 350 17 18.**

207. Ихата ҡаралтылары м/н ер бүлеме. Т. 8 960 389 96 77.

200. 3,5х5 м ҡайын бура. Т. 8 927 327 36 90.

204. Ихата ҡаралтылары м/н өй. Т. 8 962 520 72 60, 8 962 520 10 06.

215. 2 бүлмәле фатир. Ремонт. Т. 8 960 398 91 76.

201. 7 йәшлек һөт тоҡомло һыйыр. Т. 8 927 329 10 23.

212. СЗС-2.1 сәскесе. Т. 8 906 373 69 75.

219. 2015 й. Ҡалина-2 а/м, универсал. Сауҙа. Т. 8 960 399 40 42, 8 937 480 92 66.

221. Яңы «Термолюкс» газ ҡаҙаны, «Атлант» һыуытҡысы, кухня шкафы, йыйылмалы балалар диваны, шифоньер. Т. 3-23-80.

## ҺАТЫП АЛАМ

Рек. хоҡ.

120. Аккумуляторҙар, төҫлө металл, йылҡы, мал тиреһе, мөгөҙ. Ҡүмәртәләп — махсус хаҡ. Т. 8 927 309 41 71.

4791. Быҙауҙар. Т. 8 937 861 33 05.

89. Һыйыр ите, йәш мал, сараһыҙҙан һуйылған мал. Т. 8 965 925 68 22, 8 937 833 93 23.

188. Быҙауҙар. Ҡиммәт. Т. 8 967 452 23 38.

## УСЛУГИ

На пр. рекл.

155. **РЕМОНТ ХОЛОДИЛЬНИКОВ** с выездом в район. Гарантия. Т. 8 927 344 45 98.

## ХЕҘМӘТ

Рек. хоҡ.

45. Компьютерҙар ремонтлайбыҙ. Т. 8 964 964 66 55.

## Информационное сообщение

225. Комитет по управлению собственностью Министерства земельных и имущественных отношений Республики Башкортостан по Баймакскому району и городу Баймаку извещает о возможности предоставления в аренду земельного участка для ведения личного подсобного хозяйства, расположенного по адресу:

-Республика Башкортостан, р-н Баймакский, с/с Темясовский, д. Кожзавода, ул. Кожзаводская, д. 4 В, с кадастровым номером 02:06:261101:135, площадью 2449 кв. м.

Прием заявлений и документов от граждан, заинтересованных в предоставлении земельного участка и намеренных участвовать в аукционе на право заключения договора аренды осуществляется в течение тридцати дней со дня опубликования извещения. Датой окончания приема является тридцатый день со дня опубликования настоящего извещения в печати. Заявления и документы от граждан принимаются на бумажном носителе в рабочие дни по адресу: г. Баймак, пр. С.Юлаева, 9, каб. 308, тел. 8 (34751) 2-24-01.

## Рәхмәт хаты

218. Тормош ҡанундары аяуһыҙ шул... Яңы донъя йәмен үҙ күҙҙәре менән күреп, тормош юлын үҙ аллы ҡабул итергә әҙерләнеп, мәктәп тормошонда янып-көйөп, һәр үткәрелгән сарала әүҙем ҡатнашып, 7-се класта ғына уҡып йөрөгән еренән Түбәнге Яйыҡбай ауылынан Ҡәримова Көнһылыу Алтынғужа ҡыҙы ҡапыл ғына ауырып, йөрәктәрҙе һыҙлатып, был донъяларҙан китеп барҙы. Ошо ауыр ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙған туғандарға, күршеләренә, класс етәксеһе Флүрә Ғәлимйән ҡыҙына, класташтарына, ауыл муллаһы Хәсәнов Рәмил Сәфәрғәле улына, ауылдаштарына ысын күңелдән ҙур рәхмәт белдерәбеҙ. Ауылдаштарына рухи һәм матди ярҙамдары өсөн бик рәхмәтлебеҙ. Ошо бәләкәй генә ауылда шундай ихлас күңелле, оло йөрәкле халыҡ йәшәүенә ҡыуанып бөтә алманыҡ. Күршеләре Сафия апай менән Рәйлә апайҙы айырым яҙып китмәү мөмкин түгел. Улар алмашлап төнө буйы йылы сәйҙәре, ҡайнар аштары менән беҙгә көс биреп торҙо. Рәйлә апай хатта аҙаҡтан ауыл күстәнәстәре биреп оҙатып ҡалды. Ошо ауыр ваҡытта битараф ҡалмай, ярҙам ҡулы һуҙғанығыҙ өсөн оло рәхмәттәребеҙҙе белдерәбеҙ. Хоҙай Тәғәлә бөтәгеҙгә лә ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер, ғаилә именлеге насип итһен, берегеҙгә лә бала ҡайғыһы күрергә яҙмаһын. Ата-әсәһенә, апай-ағайҙарына, еҙнәйҙәренә бигерәк тә ҙур сабырлыҡтар бирһен Хоҙай.

**Баймаҡтан мәрхүмәнең олатаһы Рәжәп, инәһе Люциә.**

## Иҫкә алайыҡ

115. Ярат ауылынан беҙҙең өсөн ҡәҙерле булған улыбыҙ, ҡустыбыҙ Исчурин Вилүр Нурмөхәмәт улының беҙҙе ташлап китеүенә 4 февралдә 40 көн. Ваҡыт үтә, күңел яралары уңалмай, ҡәҙерлебеҙҙе һағынабыҙ, юҡһынабыҙ. Ул изге күңелле, алсаҡ, сабыр, ярҙамсыл ине. Ауыр тупрағы еңел, ҡараңғы гүрҙәре яҡты, йәне ожмах түрендә булһын. Ҡәҙерлебеҙҙе күреп-белгәндәр, туғандар, ауылдаштар ошо көндәрҙә уны матур хәтирәләр менән генә иҫкә алһындар ине.

**Өләсәһе, ата-әсәһе, апаһы, еҙнәһе, ағалары, еңгәләре, инәләре, олаталары, һеңлеләре, ҡустылары.**

234. Йәрмөхәмәт ауылынан беҙҙең өсөн ҡәҙерле булған Йәрмөхәмәтов Тәлғәт Харис улының, йөрәктәргә уңалмаҫ яралар һалып, ташлап китеүенә 2 йыл. Ул алсаҡ, изге күңелле, ярҙамсыл булды. Йөрәктәге юҡһыныуҙы, һағышты һүҙ менән генә аңлатып булмай. Ҡәҙерлебеҙҙе күреп-белгәндәр, туғандар, дуҫтары ошо көндәрҙә яҡшы уйҙар менән генә иҫкә алһындар ине. Ауыр тупрағы еңел, ҡараңғы гүрҙәре яҡты, йәне ожмах түрендә булһын.

**Тормош юлдашы, улдары, ҡыҙы.**

210. Һаҡмар ауылы халҡы, мәктәп коллективы, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, ветеран уҡытыусы Мырҙағәлина Фирүзә Ғилметдин ҡыҙының тормош иптәше, ветеран уҡытыусы, ауылыбыҙҙың имам-хатибы

**Әхмәтйәнов Уразбәк Хәбибйән улы**

ҡапыл вафат булып ҡалыу сәбәпле, уның, балалары һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

222. Ниғәмәт ауылының «Ағинәйҙәр» клубы етәксеһе Мөхәмәтшина Фәрзәнә Йәүҙәт ҡыҙының ҡәҙерле тормош иптәше

**Мөхәмәтшин Әфтәр Ғәле улы**

вафат булып ҡалыу сәбәпле, уның һәм балаларының, туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

***Ниғәмәт ауылының ҡатын-ҡыҙҙар советы.***

**Общественно-политическая газета «Сакмар» Баймакского района и города Баймака выходит с 2000 года 2 раза в неделю — во вторник и пятницу на башкирском языке.**
**Учредители — Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан, Государственное унитарное предприятие Республики Башкортостан Издательский дом "Республика Башкортостан".**

**Директор (баш мөхәррир) Г.С. Салихова.**
Редакцияның позицияһы автор фекере менән тап килмәүе лә мөмкин.
Иғландар, реклама материалдары реклама биреүсенең теләге буйынса рус телендә баҫылырға мөмкин, уларҙың эстәлеге өсөн редакция яуап бирмәй.
Ҡул ҡуйыу ваҡыты — 17.00.
Ҡул ҡуйылды — 17.00, 30.01.17.

Редакцияның һәм нәшер итеүсенең адресы: 453630, Башҡортостан Республикаһы, Баймаҡ ҡалаһы, С.Юлаев проспекты, 38.
Мөхәррир....3-13-26
Яуаплы секретарь....2-23-80
Бухгалтерия....2-18-38
Хәбәрселәр....2-14-99
Реклама һәм иғландар....3-13-37

Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында теркәлде. Теркәү номеры ПИ № ТУ 02-01465, 07.10.2015 й.
Баҫмаһың күләме — 1 табаҡ.
Хаҡы ирекле. Редакцияның Һаҡлыҡ банкының 8598-се бүлексәһендәге иҫәбе (р/с) 40602810706000000070.

Гәзит редакцияның компьютер үҙәгендә йыйылды, Сибай ҡала типографияһы — БР "Республика Башкортостан" нәшриәт йорто ДУП-ы филиалында баҫылды.
Типографияның адресы: 453830, Башҡортостан Республикаһы, Сибай ҡалаһы Зәки Вәлиди урамы, 22.
Һ Ошо тамға менән билдәләнгән мәҡәләләр түләүле.

© «Һаҡмар», №9 (2538), 31.01.2017
Тираж 3276+81. Заказ №245.
Индексы 50772. Сайт: www.hakmar.ru
E-mail: sakmar07@rambler.ru

БР "Республика Башкортостан" нәшриәт йорто ДУП-ы адресы: 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.